


# Яңылыҡтар һәр өйгә

2019 йылдан башлап сыға 30.01.2020 йыл №1

## Яңы йыл ғаилә уйындары – 2020

«Яңы йыл ғаилә уйындары – 2020» яңы йыл каникулдары ваҡытында 2 ғинуарҙан 6-һына тиклем ойоштороla. «Берҙәм Рәсәй»ҙең төбәк бүлексәһе ағзалары Башҡортостан башлығының Яңы йыл байрамдарында хәмер һатыуҙы сикләүгә бәйле башланғысын хуплап, ошондай тәҡдим индергән. Райондарҙа һәм ҡалаларҙа бөтә спорт кластары ла ата-әсәләре менән бергә ғаилә уйындарында ҡатнаша ала. Бәләкәйерәк балаларға – күңелле



старттар, ә өсөнсө кластан башлап мини-футбол, баскетбол, волейбол, хоккей буйынса ярыштар уҙғарыла. Еңеүселәр 18 ғинуарҙа Өфөлә республика финалында осраша. Башҡортостан башлығы Радий Хәбиров әйтеүенсә, был – һәйбәт акция, уға күберәк ҡатнашыусыларҙы йәлеп итергә кәрәк, иң мөһиме, улар мәжбүри булмаһын. Яңы йыл ғаилә уйындарының төп ҡатнашыусылары – «Сәләмәт быуын – көслө төбәк» проектының спорт кластары тәрбиәләнеүселәре. Ғаилә уйындарында, спорт кластарынан тыш, теләгән һәр кем ҡатнаша ала.

Бөтә республика буйынса үткәрелгән «Яңы йыл ғаилә уйындары» 4 ғинуар көнө Абзан урта мәктәбендә лә үтте. Был матур сарала Вәлиевтар, Кусәковтар, Бикановтар, Баһаутдиновтар, Биктиндар ғаиләләре ҡатнашты. Уҡыусылар ата-әсәләре менән тиҙлек һәм етеҙлектә, отҡорлоҡ һәм таһыллыҡта көс һынашты. Ярыштар бик сәмле барҙы. Балаларға өлкәндәр менән бер рәттән уйындарҙа ҡатнашыу оҡшаны. Сәмле ярыш еңеүсеһеҙ булмай. Көсөргәнешле көрәш һөҙөмтәһенде Вәлиевтар ғаиләһе еңеп сыҡты. Улар мәктәп данын район күләмендә үткәрелгән ярышта яҡлаясаҡ. Кусәковтар 2, Баһаутдиновтар 3 урын алды. Сара һуңында мәктәп директоры Сәриә Азат ҡыҙы еңеүселәрҙе һәм ҡатнашыусыларҙы ҡотлап иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы.



**Гөлфирә Бикбулатова**

# Волейбол ярыштары



“Оҙайлы ҡышҡы каникулдар бик яҡшы һәм файҙалы үтте “,- тиҙәр Абзан ауылының волейболсылары. 2020 йылдың 3 ғинурында Абзан урта мәктәбенең спорт залында көсөргәнешле һәм мауыҡтырғыс ярышта Ейәнсура районының Абзан, Иҙәш, Юлдаш, Ибрай, Өмбәт, Муйнаҡ ауылдарының иң көслө волеболсылары осрашты. Өмбәт ауылынан хатта ике команда ҡатнашты. Бөтә командалар ҙа сәмле һәм көслө инеләр, тик ярыш булғас еңеүселәр ҙә була. Шулай итеп был турнирҙың еңеүселәре Абзан ауылы волейболсары, икенсе урында Өмбәт ауылы командаһы, ибрайҙар - өсөнсө. Ә турнирҙың иң яҡшы уйынсыһы - Өмбәт ауылынан Юланов Элмир. Еңеүселәр һәм призерҙар кубоктар, миҙалдар һәм иҫтәлекле бүләктәр менән билдәләнелделәр. Спортсылар ошондай ярышты ойошторғандары өсөн Абзан ауылы хакимиәте башлығы Бикбулатов Нурғәле Хажиғәле улына һәм Абзан урта мәктәбенең физик культура уҡытысыһы, судья Стерликов Алексей Александровичҡа ҙур рәхмәт белдерҙеләр.

Ә 6 ғинуар көнө Иҫәнғолда үткән ҡатын-ҡыҙҙыр араһындағы волейбол ярышында Нияҙғолова Роксана, Каратова Виктория һәм Елена, Ҡарабаева Айсулпан, Дәүләтбаева Аделина, Һибәтуллина Рәмзилә составындағы уҡыусылар командаһы икенсе урын яуланы. Ҡыҙҙарға артабан да уңыштар теләйбеҙ!

**Гөлфирә Бикбулатова**

# Олимпиадалар

Һәр йылдағыса, уҡыусы балаларҙың ҡышҡы каникулында төрлө саралар ойошторола. Спорт ярыштары, мәҙәни сараларҙан тыш, уҡыусылар белемдәрен дә һынай. Мәҫәлән 9 – 11 ғинуарҙа баш ҡалабыҙ Өфөлә VIII-XI класс уҡыусылары араһында Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада үтте.

Был ярышта бөтә республиканан һәм Силәбе, Ырымбур һәм Ҡурған өлкәһенән 395 егет һәм ҡыҙ һынау тотҙан.

Конкурсанттар өсөн яңылыҡ бар – уларҙың һәр береһе “Башҡорт телен пропагандалау буйынса уҡыусыларҙың проект эше” тигән теманы яҡлай, бынан тыш уҡыусылар инша яҙа, викторина һорауҙарына яуап бирә.

Беҙҙең мәктәптең 10 класс уҡыусыһы Ҡылысбаев Илмир өсөнсө йыл рәттән был олимпиадала ҡатнаша. Ул быйыл да һынатманы. Ярышта күрһәткән яҡшы һөҙөмтәләре өсөн Мәғариф министырлығының Маҡтау ҡағыҙына лайыҡ булды.

“Башҡа йылдарҙан айырмалы рәүештә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада үткән көндәрҙә уҡытыусылар өсөн дә бай программа тәҡдим ителде,”- ти Илмиҙың етәксеһе, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Йылҡыбаева Гөлназ Рәүф ҡыҙы. Уҡытыусылар





хеҙмәттәштәренең алдынғы эш тәжрибәһе менән танышҡан, оҫталыҡ дәрестәрен ҡараған Иң ҡыҙығы: үҙҙәре лә һынау тотоп, белемдәрен тикшергән. Башҡортостан Республикаһының башҡорт һәм туған телдәр ассоциацияһы Мәғарифты үҫтереү институтының Милли мәғариф буйынса ресурс үҙәге, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы менән берлектә улар өсөн ижади викторинан ойошторған. 97 уҡытыусы араһында барған ярышта Гөлназ Рәүф ҡыҙы лайыҡлы 3 урын алды. Ошондай уҡытыусылар һәм уҡыусылар беҙҙең мәктәп данын арттыра ла инде.

**Гөлфирә Бикбулатова**

# Ҡоштар- беҙҙең дуҫтар



Орнитологтарҙың иҫәпләүе буйынса, Ер йөҙөндә 8600-гә яҡын ҡош төрө бар. Шуларҙың 300-ләп төрө Башҡортостанда осрай. Уларҙың иң күп өлөшө күсмә ҡоштар, йәғни көҙ етеү менән көньяҡ илдәргә осалар. Ләкин бик күп ҡоштар тыуған яҡтарын ташламай, ҡышларға ҡала. Ҡыш көнө ҡоштарға аҙыҡ табыуы ауырлаша, тик беҙҙең ауылда түгел. Сөнки Абзан урта мәктәбенең башланғыс класс уҡыусылары ҡоштарға тағараҡтар эшләп элде. Уҡыусыларҙың, ата-әсәләрҙең һәм уҡытыусыларҙың фантазияһына иҫ китерлек : ниндәй генә тағараҡтар юҡ ине. Был матур акциянан бөтәһе лә бик ҡәнәғәт ҡалды.

**Гөлфирә Бикбулатова**

# Большая наука начинается с малого!

Современная наука - это новые горизонты, открытия и изобретения, стремительно меняющие нашу жизнь, это удивление, желание и страсть, к познанию мира и самого себя. И, наверняка, золотой список известных

ученых завтра пополнят имена сегодняшних школьников, тех, кто делает первые шаги на пути открытий.

17 декабря состоялась научно-практическая конференция учащихся образовательных учреждений муниципального района Зианчуринский район в рамках работы "Малой академии наук". Учащиеся нашей школы приняли участие в конференции, представив свои научно-исследовательские работы. Посвящены они были творчеству и наукам.

Поздравляем победителей и призеров МАН:

Победители:

1. Ишбулатов Рифат – руководитель Бикбулатова Г.А.;
2. Тайлякова Дарина – руководитель Габдрахимова А.З.;
3. Тимербулатов Айтуган – руководитель Латыпова З.Л..

Призеры:

1. Елкибаев Чингиз – руководитель Елкибаева Г.Р.;
2. Маннатов Тимур – руководитель Латыпова З.Л.;
3. Илхамова Диера – руководитель Бикбулатова Г.Н.;
4. Файзуллина Эльвина – руководитель Бикбулатова Г.Н..

Всем желаем здоровья и творческих успехов. Стать победителями на региональных и федеральных уровнях.

Приглашаем школьников и в следующем учебном году активно заниматься научными исследованиями и покорять научные вершины не только в муниципальном уровне, но и на региональном и федеральном.

**Гульдар Бикбулатова**

# Ученик года - 2020

В нашей школе прошел школьный этап муниципального конкурса "Ученик года- 2020". В конкурсе приняли участие активные, талантливые, целеустремленные ученики. Самого лучшего ученика определяли в таких ворастных категорях: 1-4, 5-8, 9-11 классы. Участники представили визитку, соревновались в интеллектуальности, показали творческие номера. А старшеклассники еще показали мастер-классы, приняли участие в конкурсе ситуаций. Все конкурсы были направлены на выявление лидерских качеств, проверку знаний по истории и культуре Башкортостана, об истории Великой Отечественной войны, умение найти общий язык с окружающими, на развитие социальной активности ученика.

Все участники добросовестно подготовились к конкурсу. Дети читали стихи, пели песни, танцевали, организовали игры. Мероприятие всем понравилось. Выступление конкурсантов оценило объективное жюри. В итоге победителями стали следующие участники: Каепкулова Фания (3 класс), Тайлякова Дарина (6 класс), Илхамова Диёра (9а класс). Огромное спасибо классным руководителям, подготовившим участников конкурса. А победителям желаем победы на муниципальном этапе.

**Гульфира Бикбулатова**

2019 йылдан башлап сыға 30.01.2020 йыл №1

# Так держать!




28-29 января 2020 года в Уфе прошел региональный этап Всероссийской олимпиады школьников по литературе среди 9-11 классов.

Участниками регионального этапа стали 157 учащихся из 39 районов и городов Республики Башкортостан (9 классы – 47 человек, 10 классы – 57 человек, 11 классы – 53 человека). Все участники республиканского этапа являются победителями и призерами муниципального этапа.

Участникам олимпиады было необходимо выполнить пять заданий, из которых в трех проверялись их знания по теории и истории литературы, а также общая культурная эрудиция. Еще одно задание представляло собой анализ и интерпретацию художественного текста (прозы или стихов), а последнее было творческим.

Честь нашей школы и района на этой олимпиаде защищала ученица 10 класса Файзуллина Эльвина. Она не просто приняла участие , но стала призером данной олимпиады. Эльвина очень начитанная, эрудированная трудолюбивая, добросовестная, серьезная, девушка. Она учится на одни «5», является активным участником всех мероприятий школьного и муниципального уровня. Ежегодно участвует в конкурсе исследовательских работ учащихся в рамках МАН и становится призером. А мечтает она стать учителем русского языка и литературы и «сеять разумное и вечное» в сердца юного поколения. Желаем Эльвине дальнейших успехов !

**Гульфира Бикбулатова**







Редакцияның адресы: 453391, Башҡортостан Республикаһы, Ейәнсура районы, Абзан ауылы, Мәктәп урамы, 32

Баш редактор: Баһаутдинова Л.Р.
Әҙерләнеләр: Бикбулатова Г.Д., Бикбулатова Г.Н.